**Дәүләт теле булараҡ (госуд.язык )**

4 класс

1. Дөрөҫ ялғауҙы ҡуш:
1. Башҡортостан(-дан)
2. Башҡортостан(-тан)
3. Башҡортостан(-ҙан)

2. Дөрөҫ яуапты тап:
1. 25-егерме бер
2. 36-утыҙ алты
3. 45-ҡырҡ алты

3. Мостай Кәрим кем ул?:
1. йырсы
2. башҡорт халыҡ шағиры
3. батыр

4. Бер йылда нисә ай?:
1. 12
2. 9
3. 5

5. Ҡайһы рәттә һөнәрҙәр?:
1. китап, дәфтәр, ҡәләм
2. табип, уҡытыусы, һатыусы
3. завод, магазин, кафе

6. Ҡыш көнө кейә торған кейемдәр:
1. яулыҡ, сарафан, күлдәк
2. тун, бийма, бүрек
3. куртка, плащ, сандали

7. Йәй көнө кейә торған кейемдәр:
1. эшләпә, футболка, сарафан
2. бейәләй, итек, башлыҡ
3. куртка, шәл, ойоҡбаш

8. *“Ғаилә”* темаһына ҡараған һүҙҙәр:
1. итек, салбар, шәл
2. һеңле, ейән, ҡусты
3. зәңгәр, күк, ҡыҙыл

9. Сәғәт нисә? *11.25*

1. ун бер сәғәт егерме минут
2. ун бер сәғәт егерме биш минут
3. ун икенсе ярты

10. Йорт хайуандары:
1. айыу
2. һыйыр
3. тауыҡ

11.Тауыҡ нимә бирә?:
1. һөт
2. йомортҡа
3. бәлеш

12. Дарыу үләндәре:
1. кесерткән
2. бал
3. ҡымыҙ

13. Әсәйҙәр байрамы ҡасан була?:
1. 23 февраль
2. 8 март
3. 1 ғинуар

**5 класс**

1. Яңғыҙлыҡ исемдәр:
1. Ағиҙел, Өфө, Иртыш
2. ҡала, ауыл, кеше

2. *"Көҙ"*темаһына ҡараған һүҙҙәр:
1. ямғыр, һары япраҡтар, уңыш
2. ҡар, боҙлауыҡ, ҡыш бабай

3. Дөрөҫ яуапты тап:
1. мин барам
2. мин бара
3. мин барабыҙ

4. Эште, процесты белдереүсе һүҙҙәр ниндәй һорауға яуап бирә?:
1. нисә?
2. нимә эшләй?
3. кем?

5. Предметты белдереүсе һүҙҙәр ниндәй һорауға яуап бирә?:
1. нимә?
2. нисек?
3. ниндәй?

6. Кем ул Гөлфиә Юнысова?:
1.  сәсән
2. йырсы
3. балалар яҙыусыһы

7. Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәр ниндәй һорауға яуап бирә?:
1. нисә?
2. ниндәй?
3. кем?

8. Кем ул Әхмәт Лотфуллин?:
1. йырсы
2. батыр
3. рәссам

9. Предметтың иҫәбен белдереүсе һүҙҙәр ниндәй һорауға яуап бирә?:
1. ниндәй?
2. нисә?
3. нисек?

11. Был мәҡәлдә ниндәй һандар төшөп ҡалған?
*“…ҡат үлсә, …ҡат киҫ.*
1. 6, 2
2. 5, 1
3. 7, 1

**6 класс**

1.Башҡорт телендә нисә һуҙынҡы өн бар:
1. 9
2. 8
3. 3

2. *Батыр* һүҙенең синонимын тап:
1. оло
2. ҡаһарман
3. һау

3.*Яңы* Һүҙенең антонимын тап:
1. иҫке
2. ҡыҫҡа
3. матур

4. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе ниндәй хәреф менән яҙырға кәрәк?:
1.бәләкәй
2. ҙур

5. Башҡортостандағы иң ҙур йылға ниндәй?:
1. Ҡариҙел
2.  Дим
3.  Ағиҙел

6. Кем ул Ғабдрахман Ҡадыров?:
1. мотоуҙышсы, спорт мастеры
2. йырсы
3. балет артисы

7. *Төлкө* һүҙенә ниндәй сифат тура килә:
1. ҡаты
2. хәйләкәр
3. эҫе

8. Балалар өсөн башҡорт телендә сыҡҡан журнал:
1. "Аҡбуҙат"
2. "Ватандаш"
3. "Башҡортостан ҡыҙы"

9. Кем ул Салауат Юлаев?:
1. милли батыр
2. яҙыусы
3. бейеүсе

10. Яңғырау тартынҡылар:
1. б,в,г,ғ,д,ҙ,з,ж,й,л,м,н,ң,р
2. б,в,г,ғ,д,ҙ,з,ж,л,м,н,ң,р,ч,һ

11. Һаңғырау тартынҡылар:
1. п,ф,к,ҡ,т,ҫ,с,х,ц,ч,ш,щ,һ
2. п,ф,к,ҡ,т,ҫ,с,х,ц,ч,ш

**7 класс**

1. Башҡорт телендә *кем?* һорауы бирелә:
1. кеше исемдәренә
2. бөтә исемдәргә

2. Дөрөҫ ялғау ҡуш:
1. бала(-дар)
2. бала(-ҙар)
3. бала(-лар)

3.*Мәктәптә* һүҙе ниндәй килештә:
1. төп
2. урын-ваҡыт
3. сығанаҡ

4.*Кемдең? Нимәнең?* һорауына ниндәй килеш яуап бирә?:
1. төп
2. эйәлек
3. бер килеш тә яуап бирмәй

5.*"Болон"* һүҙе эйәлек килештә ниндәй ялғау ҡабул итә?:
1. –доң
2. –дың

6. Кем ул Зәйнәп Биишева?:
1. шағирә
2. халыҡ яҙыусыһы
3. йырсы

7. Сифаттарҙың нисә дәрәжәһе бар?:
1. 5
2. 4
3. 2

8. *Матурыраҡ"* һүҙе ниндәй дәрәжәлә:
1. төп
2. сағыштырыу
3. артыҡлыҡ
4. аҙһытыу

9.Кем ул Рәшиҙә Туйсина?:
1. йырсы
2. шағирә
3. бейеүсе

10. *Яҙам* ҡылымы нисәнсе затта, заманда килгән?:
1. 1затта, хәҙерге заманда
2. 2-се затта, хәҙерге заманда
3. 1-се затта, үткән заманда

11. Ҡушма һандар:
1. егерме бер
2. мең
3. йөҙ

12. Кем ул Ишмулла Дилмөхәмәтов?:
1. йырсы
2. ҡурайсы
3. думбырасы

13. Эйәлек килештәге алмашты тап:
1. мин
2. минең
3. мине

**8 класс**

1.Күплек ялғауҙарын тап:
1. –та(тә),-да(дә),-ҙа(ҙә),-ла(лә)
2. –тар(-тәр),-дар(дәр),-ҙар(ҙәр),-лар(ләр)

2. Башҡорт телендә нисә килеш бар:
1. һигеҙ
2. алты
3. биш

3. *Гимназияға* һүҙе ниндәй һорауға яуап була?:
1. ҡайҙа?
2. ҡайҙан?
3. нимәлә?

4. *Мәктәптәрҙә* һүҙе ниндәй килештә килгән?:
1. урын-ваҡыт
2. сығанаҡ
3.эйәлек

5. *Минән* алмашы нисек тәржемә ителә?:

1. у меня
2. от меня
3. мне

6. Балалар өсөн башҡорт телендә сыҡҡан гәзит:
1. “Башҡортостан”
2. “Йәншишмә”
3. “Аҙна”

7. Һорау алмаштары:
1. кем? нимә?ниндәй? нисек? ҡасан? нисә? ҡайҙа? ҡайҙан? нисәнсе?
2. һис кем, һис ҡасан, һис ҡайҙа
3. һәр ҡайҙа, һәр береһе, бөтәһе
4. әллә кем,әллә ниндәй, әллә ҡайҙан, әллә нисек

8. Республикабыҙҙың тыуған көнө:
1. 10 октябрь
2. 24 декабрь.
3. 11 октябрь

9. Башҡортостанда нисә район бар?:
1. 55
2. 54
3. 64

10. Башҡортостан Гербының авторы:
1. Ә.Лотфуллин
2. Ф.Ислахов
3. Ф.Иҙрисов

11. Башҡортостан Гимны авторы:
1. Ф.Иҙрисов
2. З.Исмәғилев
3. Ф.Ислахов

12. Антонимдар бирелгән рәт:
1. аҡ-ҡара, яй-шәп
2. кәртүк, ер алмаһы, бәрәңге
3. ваҡлау, онтау, турау

13. Синонимдар бирелгән рәт:
1. батыр, ҡурҡаҡ,
2. ҙур, батыр, бәләкәй
3. матур, һылыу, гүзәл

14. Салауат Юлаев һәйкәленең авторы:
1. Т.Нечаева
2. В.Вучетич
3. С.Тавасиев

## 9 класс

1. Башҡортостандың төп халҡы:
1. татар
2. рус
3. башҡорт

2. *Балам* һүҙендә ниндәй ялғау:
1. күплек ялғауы
2. килеш ялғауы
3. эйәлек заты ялғауы
4. хәбәрлек ялғауы

3.*Балаларымды* һүҙендә ниндәй ялғауҙар:
1. күплек ялғауы, килеш ялғауы
2. күплек ялғауы, эйәлек заты ялғауы, килеш ялғауы
3. килеш, эйәлек заты, хәбәрлек ялғауы

4. Предметтың билдәһен белдергән һүҙ:
1. сифат
2. һан
3. ҡылым
4. исем

5. *Ап-аҡ, бик матур* сифаттарының дәрәжәһе:
1. төп
2. сағыштырыу
3. артыҡлыҡ
4. аҙһытыу

6. Шартлы сифаттар бирелгән рәт:
1. киң урам, һәйбәт һүрәт, иркен өй
2. алтын сәғәт, ҡышҡы юл, тимер юл
3. шәп йүгерә, матур яҙа
7. Синонимдар бирелгән рәт:
1. матур, һылыу,гүзәл
2. матур,йәмһеҙ
3. өҫтәл, ултырғыс

8. Антонимдар бирелгән рәт:
1. кескәй, бәләкәй
2. таҙа, бысраҡ
9. *Алдау”* һүҙенә тап килгән фразеологизм:
1. балауыҙ һығыу
2.морон күтәреү
3. кәкре ҡайынға терәтеү

11. Башҡортостан гимны һүҙҙәренең авторҙары:
1. Р.Шәкүр, Р.Бикбаев
2. М.Кәрим
3. Б.Байым

12. *“Тыуған илем*”шиғырының авторы:
1. М.Кәрим
2. Б.Бикбай
3. С.Юлаев

# Туған тел булараҡ

**<u>5 класс</u>**

1.*“Иҫемдә алтын һуҡмаҡҡа*
*Тәү аяҡ баҫҡан көнөм-*
*Тәү башлап мәктәп ишеген*
*Үрелеп асҡан көнөм”.*
Был шиғыр юлдарын кем яҙған?:
1.Р.Бикбаев
2.М.Кәрим
3.Р.Ғарипов

2.*“Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,*
*Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин…”*
Был шиғыр юлдарын кем яҙған?:
1.З.Биишева
2. Р.Ғарипов
3. С.Ҡудаш.
4. Р.Бикбаев

3. Мәшһүр *“Урал”* йырының  боронғо исеме:
1. Яйыҡ
2. Ағиҙел
3. Ете ырыу

4. Р.Заһретдинов:
1. йырсы
2. бейеүсе
3. ҡумыҙсы

5. Р.Туйсина:
1. яҙыусы
2.шағирә
3. бейеүсе

6. Был ниндәй һөйләм? *Мин унда булырға тейеш!*
1. һорау
2.өндәү
3. хәбәр
4. бойороҡ

7. Эйә ниндәй һорауға яуап бирә?:
1. нимә эшләй?
2. кем? нимә?

## 6 класс

1. *“Мин халҡымдың сәскә күңеленән*
*Бал ҡортондай ынйыы йыямын”.*
Был шиғыр өҙөгөнөң авторы:
1. Б.Бикбай
2. Р.Ғарипов
3. Р.Ниғмәти

2. *В* хәрефе ниндәй һүҙҙә *у* өнө булып әйтелә:
1. ватан
2. вагон
3. велосипед

3.Ниндәй әкиәттә малай һуңғы 100 һум аҡсаһын биреп, һөнәрҙәргә өйрәнә:
1. “Ҡамыр батыр”
2. ”Аҡъял батыр”
3. “Әминбәк”

4. Т.Ғәниеваның *“Уралиә тигән ил*” - ул:
1. хикәйә
2. әкиәт
3. повесть
4.шиғыр

5. *“Ай Ағиҙел, Ағиҙел,*
*Күпте күргән Ағиҙел”…*
Был шиғыр юлдарының авторы кем?:
1.Р.Бикбаев
2. Р.Ниғмәти
3. М.Кәрим

6. Нимә ул антонимдар?:
1. Бер үк мәғәнәне белдергән һүҙҙәр
2. Тамырҙаш һүҙҙәр
3. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәне белдергән һүҙҙәр

7. *“Хәмит күпере”, “Йылмайыу”* әҫәрҙәренең авторы:
1. М.Кәрим
2. Ф.Иҫәнғолов

3. Н.Мусин

8. Башҡорт халыҡ йырҙары:
1. “Уҡытыусыма”
2. “Әсәй менән гөл ултырттыҡ”
3. “Шәл бәйләнем”,”Урал”

9. *“Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән”* әкиәтендә ыңғай герой:
1. Ҡәмән
2. Сәмән
3. Сәлмән

10. *Мостай Кәримдең “Өс таған”* повесының төп геройҙары:
1. Ғабдулла, Айҙар, Вәзир, Яҡуп
2. Фәрит, Фәһим
3. Шәһит, Кинйәбай

**<u>7 класс</u>**

1. *“Атай, йортоң тәҙрәләре*
*Үтә лә ҙур уйылған”*.(Д.Талхина). Рәүеште табып, дәрәжәһен билдәлә:
1. сағыштырыу
2. артыҡлыҡ
3. бында рәүеш юҡ

2. Ниндәй ҙә булһа заттың, предметтың эшен, хәрәкәтен йә торошон белдергән һүҙ:
1. исем була
2. сифат була
3. ҡылым була

3. *Уҡы* ҡылымының һөйкәлеше:
1. бойороҡ
2. хәбәр
3.шарт
4. теләк

4. Шарт һөйкәлеше булған һөйләм:
*1.Бөгөн мин унда бармаҡсымын*
*2. Йөрөүҙәрем бушка булманы*
*3. Ундай һөйләм бында юҡ*

*4. Ул беҙгә кисә килгән*
*5. Күп көлһәң-иларһың*

5. *Ашағым килә* ҡылымының һөйкәлеше:
1. бойороҡ
2. хәбәр
3.шарт
4. теләк

6. *Бармайым* ҡылымының һөйкәлеше:
1. бойороҡ
2. хәбәр
3.шарт
4. теләк

7. Ябай һандар бирелгән рәт:
1. бер, мең, йөҙ, миллион
2. егерме дүрт, алтмыш ете
3. өстән ике, алтынан һигеҙ

8. *Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.* Һанды табып, төркөмсәһен билдәлә:
1. сама һаны
2. кәсер һаны
3. бүлем һаны
4. йыйыу һаны
5. төп һан
6. рәт

9. Составында рәт һаны булған һөйләм:
*1. Бирәүҙән икәү якшы.*
*2. Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.*
*3. Мин икенсе булып килдем.*
*4. Сәғәт өстә дәрес бөтә.*

10. *Һәр синыфта егерме бишәр укыусы бар.* Һөйләмдәге һандың төркөмсәһе:
1. сама һаны
2. кәсер һаны
3. бүлем һаны
4. йыйыу һаны
5. төп һан
6. рәт

11. "*Сәрбиямал...егерме биш-утыҙ йәштәр самаһындағы ҡатын ине*". (З.Биишева). Һанды табып, төркөмсәһен билдәлә:

1. сама һаны
2. кәсер һаны
3. бүлем һаны
4. йыйыу һаны
5. төп һан
6. рәт

12. Башҡортостанда иң бейек тау:
1. Ирәмәл
2. Ямантау
3. Ирәндек

13. Был шиғыр юлдарының авторы:
*“Арыҫландар үҙ ерен*
*Залимдарҙан таптатмаҫ…”*
1.З.Биишева
2.Ф.Туғыҙбаева
3.Ш.Бабич

14. Предметтарҙы белдергән һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?:
1. исем
2. ҡылым
3. сифат
4. рәүеш

15. Исемгә хас булмаған грамматик категория:
1. килеш
2. һан
3. эйәлек заты
4. хәбәрлек заты
5. йүнәлеш

**8 класс**

1. *“Дутов, Колчак әйтә: эш башына*
*Алтын тажлы батша менһен, тип”*
(Ш.Бабич. Башҡорт халҡына көйлө хитап)
Билдәләнгән сифат:
1.төп
2.шартлы

2. Шартлы сифаттар дәрәжә менән үҙгәрәме?:
1. эйе
2.юҡ

3. А.Матросовтың(Ш.Мөхәмәтйәнов) ҡаһарманлығы тураһында ниндәй әҫәрҙә яҙылған.
1. Р.Солтангәрәев. “Осто бөркөт”.
2. Ә.Бикчәнтәев. “Бөркөт һауала үлә”.
3. Я.Хамматов. “Башҡорттар китте һуғышҡа”.

4. Рим цифрҙарынан һуң ялғау…
1. яҙыла
2. яҙылмай

5. Датаны белдергән һандарға яҙыуҙа…
1. ялғау ҡушыла
2. ялғау ҡушылмай

6. Һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙе йә ябай һөйләмдәрҙе бер ҡушма һөйләм итеп бәйләүсе һүҙ төркөмө нисек атала?:
1. бәйләүес
2. теркәүес
3. киҫәксә

7. *Сөнки, шуға, шуға күрә, тимәк, шулай булғас, әгәр, гүйә*
Был теркәүестәр:
1.эйәртеүле
2. теҙеү
3. бында теркәүес юҡ

8. Һөйләмдәге эйәреүсе һүҙҙе-эйәртеүсе һүҙгә, эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләй торған һүҙ төркөмө:
1. теркәүес
2. бәйләүес
3. киҫәксә

9. Ҡайһы рәттә бәйләүестәр бирелгән?:
1. менән, өсөн, хаҡында, аша, тураһында
2. ә, һәм, йәнә, әле, ләкин, әммә, бәлки
3. ла баһа, та баһа, ғына-генә, уҡ-үк, бит

10. Үҙ аллы һүҙҙәргә төрлө мәғәнә биреүсе һүҙ төркөмө:
1. теркәүес
2. бәйләүес
3. киҫәксә

11.Һөйләүсенең үҙе әйткән фекергә, эш-хәлгә ҡарата мөнәсәбәтен белдереүсе һүҙҙәр:
1.исем була
2. мөнәсәбәт һүҙ була
3. ымлыҡтар була

12*. Их, ур-ра, ҡышты-ҡыштыр.* Бирелгән һүҙҙәр:
1. ымлыҡтар
2. мөнәсәбәт һүҙҙәр
3. исемдәр

**9 класс**

1. Башҡорт телендә баҫым күп осраҡта:
1. беренсе ижеккә төшә
2. икенсе ижеккә төшә
3. һуңғы ижеккә төшә

2.*“Ана Ульянов кейенһен, Каранаев менән Горшков-һалдаттар”.* Билдәләнгән ҡылым һөйкәлеше:
1. шарт
2. теләк
3. хәбәр
4. бойороҡ

3. *“Тәҙрәнән ҡараһам, майланмаған итегем ит ташый, сылғауым бейеп йөрөй, олторағым йоҡлап ята”.* (“Ерәнсә сәсән” әкиәтенән) Билдәләнгән ҡылым һөйкәлеше:
1. шарт
2. теләк
3. хәбәр
4. бойороҡ

4. *“Бөйөк немец шағиры Иоган-Вольфганг Гете менән Веймарҙа осрашҡандан бирле, Ҡаһым түрә үҙендә дәрт, көс һәм мәңге юйылмаҫ хистәр, рухи байлыҡ өҫтәлеүен тойҙо”.* (Я.Хамматов. Төньяҡ амурҙары)
Билдәләнгән ҡылым ниндәй заманда килгән?:
1. хәҙерге
2. үткән
3. киләсәк

5. *“Йәмле генә Урал буйын ташлап*
*Киткеләрем килмәй илемдән”.* (Халыҡ йыры “Йәйләүлек”)
Билдәләнгән ҡылым һөйкәлеше:
1. шарт
2. хәбәр

3.  теләк
4. бойороҡ

6. *“Яландарым, урманым,*
*Күккә ашкан Уралым…”* (С.Юлаев. Тыуған илем)
Билдәләнгән ҡылым төркөмсәһе:
1.исем ҡылым
2.уртаҡ ҡылым
3.сифат ҡылым
4.хәл ҡылым

7. *“Ә юлсыларҙың юлда булыуы якшы”.* ( М.Кәрим. Айгөл иле).
Билдәләнгән теркәүес:
1. ябай
2. ҡушма

8.*“Гүйә, улар шунда йәнләнделәр,*
*Нурҙар сәсеп ем-ем көлдөләр”.* (М.Ғафури. Гөлдәр баҡсаһында)
Билдәләнгән һүҙ:
1. модаль һүҙ
2. теркәүес
3. бәйләүес

9. Ымлыҡтар һан, эйәлек, хәбәрлек заты, килеш, заман, дәрәжә менән үҙгәрәме:
1. эйе
2. юҡ

10. *Ағиҙел менән Ҡариҙелдә суднолар йөрөй ала.* Билдәләнгән ҡылым :
1. ябай
2. ҡушма

11. *Алма ағасынан алыҫ төшмәй.* Был һөйләм:
1. бер составлы
2. ике составлы

12. *Себеште көҙ һанайҙар.* Был һөйләм:
1. бер составлы
2. ике составлы

13. *Ашыҡҡан-ашҡа бешкән.* Һөйләмдең эйәһе:
1. *ашыҡҡан*
2.эйәһе юҡ
3. *ашҡа*

**10 класс**

1. *Ике икең-дүрт.* Һөйләмдең хәбәре:
1. хәбәре юҡ
2. *дүрт*
3. *икең*

2. Юҡлыҡ булмағанлыҡ төшөнсәһе башҡорт телендә нисек бирелә?
1. юҡ, түгел, -ма,-мә, -һыҙ,-һеҙ
2. эйе, ярай

3. *Ҡалған эшкә ҡар яуыр.* Билдәләнгән һүҙ:
1. тултырыусы
2. хәл
3. аныҡлаусы
4. *<u>Ағасты</u> япраҡ биҙәй, <u>кешене</u> хеҙмәт биҙәй.* Билдәләнгән һүҙҙәр:
1. тултырыусы
2. хәл
3. аныҡлаусы

5. *"Беҙҙең Ватан, ҡыҙым, матур,*
*Ҡояштай балҡып тора";*
Был шиғыр юлдарының авторы:
1. Р.Ниғмәти
2. М.Харис
3. М.Кәрим

6. Нимә ул ҡобайыр?:
1. шиғыр
2. дан йыры
3. йыр

7. *"Атам кейәү булған ер,*
*Әсәм килен булған ер".* Был ниндәй ҡобайыр?:
1. "Ай Уралым, Уралым"
2. "Боронғоларҙан аманат"
3. "Салауат батыр"

8. *"<u>Хатты асыу</u> менән үк бөтәһе аңлашылды Һеләүһенгә".* (Ғ.Ибраһимов. Кинйә) Билдәләнгән һүҙбәйләнеш ниндәй юл менән яһалған?:
1. ярашыу
2. башҡарылыу
3. һөйкәлеү

4. йәнәшәлек

9. *Яктыра.*Был ниндәй һөйләм?:
1. билдәле эйәле һөйләм
2. билдәһеҙ эйәле һөйләм
3. эйәһеҙ һөйләм
4. атама һөйләм

10. Афористик жанрҙарға инә:
1. мәҡәлдәр, әйтемдәр, һынамыштар, йомаҡтар
2. ҡобайырҙар, әкиәттәр, көләмәстәр
3. бәйеттәр,сеңләүҙәр

11. Кәмендә өс ябай һөйләмдән торған, уларҙың береһе баш, ә ҡалғандары эйәрсән булған һөйләм:
1. күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм була
2. ҡатнаш ҡушма һөйләм була
3. теҙемдәр була

**<u>11 класс</u>**

1. Кем ул Һ.Дәүләтшина?:
1. бейеүсе
2. йырсы
3. яҙыусы

2. *Кәләште ап-ак туй күлдәгенә кейендереү йолаһы 1558 йылда барлыкка килгән.*
Был һөйләм:
1. бер составлы
2. ике составлы

3. *Яҙ иртә килһә, ашлык уңыр.*
Һөйләмдә ҡылым ниндәй заманда килгән?
1.хәҙерге
2.үткән
3. киләсәк

4. *Б.Бикбайҙың “Ҡаһым түрә”*драмаһында ваҡиғалар нисәнсе йылдарҙа бара?:

1. 1941-1945 йй.
2. 1773-1175 йй.
3. 1812-1813 йй.

5. Кем ул А.Мөбәрәков?:
1. рәссам
2. артист
3. йырсы

6. *“Ул йорт ҡора, ә мин өйрәндем*
*Тулҡындарға ҡаршы йөҙөргә”.*(Ғ.Сәләм. Шоңҡар)
Билдәләнгән һүҙ:
1.аныҡлаусы
2.тултырыусы
3. хәл

7. *Йәйге көн йыл туйҙырыр.*
Ҡылымдың заман формаһы:
1. үткән
2. хәҙерге
3. киләсәк

8. *“Тирене иң артҡы урынға һалдылар”.*( Н.Мусин. Йыртҡыс тиреһе)
Бер составлы һөйләмдең ниндәй төрө?:
1. билдәле эйәле һөйләм
2. билдәһеҙ эйәле һөйләм
3. эйәһеҙ һөйләм
4. атама һөйләм

9. *“Уралҡайым! Һинең һәр ташыңа*
*Ҡанлы-данлы тарих яҙылған…”* (Р.Ғарипов. Урал йөрәге)
Билдәләнгән һүҙ:
1. өндәш һүҙ
2.тура телмәр

10. Хәбәр һөйләм аҙағында ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?
1. һыҙыҡ
2. нөктә
3. ике нөктә

*11. Әлифба, китап, ҡәләм, аманат, ғаилә, ләззәт, талип, фән, шаһит*
Был һүҙҙәр ҡайһы телдән үҙләштерелгән:
1. ғәрәп
2. фарсы
3. рус

12. *Эшләпә, лампа, йәшник, трамвай, указ, император*
Был һүҙҙәр ҡайһы телдән үҙләштерелгән:
1. ғәрәп
2. фарсы
3. рус

13. Ниндәй һүҙҙәр синонимдар тип атала?:
1. ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр
2. бер төрлө яңғыраған, ләкин мәғәнәләре менән оҡшаш булмаған һүҙҙәр
3. мәғәнәләре бер төрлө, ә яҙылыштары төрлөсә булған һүҙҙәр

14. *Күҙ төшөрөү* нығынған һүҙбәйләнешенең мәғәнәһе:
1. ҡарау
2. аптырау
3. эшләмәү

15. Нимә ул сингармонизм?:
1. өндәрҙең бер-береһенә ярашыуы
2. һуҙынҡы өндәрҙең төшөп ҡалыуы